*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА*

# ДУҪЛЫҠ ДАУАМ ИТӘ

*12 сентябрҙән 19-на тиклем Башкортостандың баш калаһы Өфө төрки телле театрҙарҙың IV "Туғанлык" халык-ара фестивале майҙанына әүерелде.*

*ТӨРКСОЙ тарихынан:*

*1992 йылда алты бойондорокһоҙ төрки телле илдең мәҙәниәт министрҙары башта Истанбулда, артабан Бакуҙа осрашып, ТӨРКСОЙ-ҙың "нигеҙ ташын һала". 1993 йылдың 12 июлендә Ҡаҙағстандың элекке баш калаһы Алматыла уны ойоштороу тураһындағы Халык-ара килешеүгә кул куйылды. Башкортостан Республикаһы ошо вакыттан алып күҙәтеүсе ил сифатында ТӨРКСОЙ эшмәкәрлегендә катнаша башлай.*

*— Европа менән Азия китғалары тоташкан ерҙә урынлашкан Башкортостан, геосәйәси хәленә бәйле, ТӨРКСОЙ өсөн генә түгел, бәлки бөтә төрки донъяһы өсөн дә әһәмиәтле ил, — тине үҙенең интервьюһында ТӨРКСОЙҙың генераль директоры, Әзербайжан Республикаһының Рәсәйҙәге Ғәҙәттән тыш һәм тулы хокуклы илсеһе Полад Бюль-Бюль оглы. — Башкорт халкының тарихы, уның аякка баҫыу, нығыныу һәм милли үҙаңының үҫеш этаптары, башкорт милләтенең каһарман улы, яугир һәм шағир Салауат Юлаевтың тормошо был төбәктең данлы үткәне хакында һөйләй. Икенсенән, интернациональ демографик йөҙө һәм күп яклы тел-мәҙәни йыйылмаһы менән заманса Башкорт иленең тәжрибәһе күптәргә өлгө булып тора. Был бигерәк тә этник йәһәттән һәм төрлө диндәрҙең үҙ-ара килешеп-һыйышып йәшәү мәсьәләһен хәл итеү ерлегендә асык күренә. Быуаттар буйы Рәсәйҙең үҙәгендә йәшәп, бөйөк Рәсәй мәҙәниәте хазиналарынан көс алып, башкорт халкы үҙенә генә хас традициялар һәм йәшәү королошо асылын, мәҙәниәте үҙенсәлектәрен һаклап кала алған.*

*"Туғанлык" халык-ара фестивалено Башкортостан Президенты Мортаза Рәхимов ебәргән котлауҙа: "Туғанлык" уртак тамырҙар берләштергән, бер-береһенең телен аңлаған кешеләрҙең якынлығын аңлата. Был байрам — бәйләнештәребеҙҙең, милләт-ара дуҫлыкты үҫтереү һәм төрки телле халыктарҙың юғары театр сәнғәте аша үҙ-ара байығыуының сағыу дәлиле", — тиелә.*

Фестиваль Дуҫлыҡ монументына сәскәләр һалыуҙан һәм ошо абруйлы сарала ҡатнашыусыларҙың Пушкин, Театр, Фрунзе урамдарында йәнле парады менән асылды.

Тантанала ТӨРКСОЙ халыҡ-ара ойошмаһының генераль директоры, Әзербайжан Республикаһының Рәсәйҙәге Ғәҙәттән тыш һәм тулы хоҡуҡлы илсеһе Полад Бюль-Бюль оглы, Рәсәйҙең халыҡ артисы Владимир Андреев, Рәсәйҙең атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Константин Щербаков, БР Дәүләт йыйылышы — Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев, Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Рафаэль Байдәүләтов,

Премьер-министр урынбаçары, мəҙəниəт һəм милли сəйəсəт министры Илдус Илишев, мəғариф министры Зөһрə Рəхмəтуллина, Өфө ҡалаһы ҡала округы башлығы Павел Качкаев һəм башҡа рəсми вəкилдəр ҡатнашты.

М.Ғафури исемендəге Башҡорт дəүлəт академия драма театры алдындағы театрлаштырылған тамашанан һуң Башҡортостан Хөкүмəте Премьер-министры Рафаэль Байдəүлəтов Башҡортостан Президенты Мортаза Рəхимовтың фестивалдə ҡатнашыусыларға ҡотлау сəлəмен уҡып ишеттерҙе, сараға уңыштар, ижади коллективтарға илһам, дəрт телəне. ТӨРКСОЙ халыҡ-ара ойошмаһының генераль директоры Полад Бюль-Бюль оглы бөтə төрки донъяһының мəҙəниəт министрлыҡтары исеменəн байрамдағыларҙы тəбриклəне, аралашыу бəхетен кисереүҙəре менəн ҡотланы.

IV ”Туғанлыҡ” халыҡ-ара фестивалендə йəмғеһе 12 театр ҡатнашты. Улар араһында М.Ғафури исемендəге Башҡорт дəүлəт академия драма театры, М.Кəрим исемендəге БР Милли йəштəр театры, В.Кок-Оол исемендəге Тыва музыкаль-драма театры, Ҡырғыҙ Республикаһының К.Жантошев исемендəге Ысыҡкүл музыкаль-драма театры, А.Мөбəрəков исемендəге Сибай башҡорт дəүлəт драма театры, Əзербайжан дəүлəт академия милли драма театры, Ҡ.Кулиев исемендəге Балҡар дəүлəт драма театры, К.Иванов исемендəге Сыуаш дəүлəт академия драма театры, Төркиə Республикаһының Анкара дəүлəт театры, ”Читиген” Хакас музыкаль-драма театры, Ғ.Камал исемендəге Татар дəүлəт академия драма театры, Саха (Яҡут) Республикаһының Юмор һəм сатира дəүлəт театры бар ине.

Фестивалдең юғары кимəлдəге сара булыуын унык жюри составы ла асыҡ раçлай. Рəйесе — В.А.Андреев, М.Е.Ермолова исемендəге театрҙың художество етəксеһе, профессор, Рəсəй Театр сəнғəте академияһының (элекке ГИТИС) актер оçталығы кафедраһы мөдире,

*”Туғанлыҡ” фестивален асыу мəле*




*"Урал батыр" спектакленән күренеш*

СССР-ҙың халыҡ артисы, Рәсәй дәүләт премиялары лауреаты. Жюри ағзалары: Б.А.Морозов — Рәсәйҙең халыҡ артисы, профессор, Рәсәй Армияһы театрының баш режиссеры, М.М.Корчак — РФ Театр эшмәкәрҙәре союзының милли һәм драма театрҙары кабинеты етәксеһе, Рәсәй режиссерҙары гильдияһының яуаплы секретары, Л.Е.Остропольская — Мәҙәниәт һәм кинематография буйынса федераль агентлыҡтың хәҙерге заман драматургияһы буйынса эксперт советы ағзаһы, Евг.Вахтангов исемендәге дәүләт академия театрының әҙәби бүлеге мөдире, П.О.Хомский — Рәсәйҙең халыҡ артисы, Рәсәй Театр сәнғәте академияһы профессоры, Моссовет исемендәге театрҙың художество етәксеһе (Мәскәү), Э.Алиева — ТӨРКСОЙ-ҙың генераль дирекцияһы эргәһендә Әзербайжандың даими вәкиле, театр тәнҡитсеһе (Анкара, Төркиә), Г.Ж.Аспетова — Ҡаҙағстандың халыҡ артисткаһы, профессор, Ҡаҙағстан Республикаһы Музыка академияһының театр кафедраһы уҡытыусыһы, сәнғәт белгесе (Астана), К.Сейдалиева — Ҡырғыҙстандың атҡаҙанған артисткаһы, Ҡырғыҙстан Республикаһының Б.Кыдыкеева исемендәге дәүләт премияһы лауреаты (Бишкәк), С.Ғ.Күсимова — Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, профессор, З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһының сәнғәт тарихы һәм теорияһы кафедраһы мөдире, М.И.Рабинович — Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Республика рус дәүләт академия драма театрының художество етәксеһе, БР Театр эшмәкәрҙәре союзының режиссерҙар гильдияһы рәйесе, А.Ҡ.Ҡарабулатова — БР Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығының сәнғәт бүлеге етәксеһе, жюри секретары (Өфө).

Кискеһен фестиваль ҡунаҡтарының бөтәһе лә М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына "Урал батыр" эпосы буйынса (Ғ.Шафиҡовтың сәхнә варианты) ҡуйылған спектаклгә йыйылды.

"Урал батыр" эпосы — донъялағы иң боронғо әҫәрҙәрҙең береһе, башҡорттоң тәрән асылы. Бөйөк сәсән-фольклорсы Мөхәмәтша Буранғоловҡа уны яҙып алып, беҙҙең көндәргәсә еткергәне өсөн рәхмәт әйтеп, үҙенә һәйкәл ҡуйырлыҡ!

Сәхнәгә ҡуйылған әҫәрҙә Урал менән Шүлгән образдарына ҙур иғтибар бүленә. Урал, үлемде еңеп, кешеләргә Мәңгелек йәшәү бүләк итергә теләй. Ә Шүлгәндә, ҡабырсаҡтан атай-әсәй рөхсәтенән тыш ҡан эскән, йола боҙған егеттә, бөтөнләй башҡа уйҙар. Ул үҙ мәнфәғәтен ҡайғыр-

та. Ана шул образдар аша режиссер йәшәү — үлем, яҡшылыҡ — яманлыҡ алышын, шул уҡ ваҡытта Урал образы аша башҡорттоң йомартлығын, киң күңеллелеген, артыҡ ышаныусанлығын да күрһәтергә тырыша. Үҙенсәлекле костюмдарға, Мәңгелекте сағылдырған декорацияға ябай, әммә шул уҡ ваҡытта тәрән мәғәнә һалып эшләнгән. Композиторҙар Салауат Низаметдинов менән Урал Иҙелбаевтың көйҙәрендә тәьҫир көсө ҙур. Рөстәм Хәкимов башҡорт, Башҡортостан сәнғәтендә беренселәрҙән булып "Урал батыр" эпосын сәхнәләштергән режиссер булараҡ үҙ исемен тарихҡа яҙҙы, тип әйтергә мөмкин. Әлбиттә, матур тел менән яҙылған поэтик әҫәрҙе сәхнәләштереү еңел эш түгел. Шуға күрә был спектакль өҫтөндә эш киләсәктә лә дауам итәсәк.

Артабан "Туғанлыҡ" фестивале бәйгеһе Ғ.Мусрепов исемендәге Ҡаҙаҡ балалар һәм үҫмерҙәр дәүләт академия театры тәҡдим иткән "Алма баҡсаһы" (Т.Теменов) лирик драмаһы менән дауам итте. Шул уҡ көндө Өфө "Нур" татар дәүләт театрында Х.Ибраһимовтың "Еҙнәкәй" комедияһын ҡарарға мөмкин булды.

Ғөмүмән, фестивалдең һәр көнө тамашаларға бай ине. Театр һөйөүселәр бер сәхнәлә К.Жантошев исемендәге Ысыҡкүл музыкаль-драма театрының "Медея" трагедияһын ҡараһа, икенсеһендә В.Кок-Оол исемендәге Тыва музыкаль-драма театры тәҡдим иткән "Йәйге төндәге төш" (В.Шекспир әҫәре буйынса) комедияһын тамаша ҡылды. Шул көндө Башҡорт дәүләт филармонияһы сәхнәһендә "Сулпан" Сибай дәүләт балалар театры А.Селиндың "Яҡты киләсәк" трагик фарсы менән сығыш яһаны.

15 сентябрь көнө М.Кәрим исемендәге БР Милли йәштәр театры үҙ сәхнәһендә күренекле әҙиптең "Беҙҙең өйҙөң йәме" повесы буйынса хәтирәләрен күрһәтһә, А.Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт драма театры драматург Ф.Бүләковтың "Буйҙаҡтар" комедияһын тәҡдим итте.

Фестивалдең ҡалған өс көнөндә тәҡдим ителгән спектаклдәр ҙә бәйгелә һынатманы. Әзербайжан дәүләт академия милли драма театрының "Үлтереүсе" (Р.Эльчин) трагедияһын, К.Иванов исемендәге Сыуаш дәүләт академия драма театрының "Бурандың сасҡау һулышы" (И.Бунин) драмаһын, Ҡ.Кулиев исемендәге Балҡар дәүләт драма театрының "Таш ауазы" (Б.Берберов) трагедияһын да тамашасылар йылы ҡабул итте.

Төркиә Республикаһының Анкара дәүләт театры тәҡдим иткән "Бурысымды күҙ йомоп атҡарам" комедияһы (Х.Танер) ҡапма-ҡаршылыҡлы характерҙар, үҙенсәлекле кисерештәр аша йәмғиәт һулышын тойомларға ярҙам итһә, Ғ.Камал исемендәге Татар дәүләт академия театрының "Өс һеңлекәш" (А.Чехов) драмаһы үткәндәр аша бөгөнгө көнгә ҡараш ташларға мөмкинлек асыуы менән фәһемле булды.

*"Урал батыр" спектакленән күренеш*





*”Кәкүк ояһы” спектакленән күренеш*

Әммә, нисек кенә булмаһын, тамашасылар үҙебеҙҙең яратҡан М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры фестиваль өсөн махсус әҙерләгән спектаклде — Кен Кизиҙың ”Кәкүк ояһы тәңгәленән осоп барышлай” психологик триллеры буйынса ҡуйылған ”Кәкүк ояһы” спектаклен (режиссеры — Айрат Абушахманов, рәссамы — Таң Еникеев, композиторы — Урал Иҙелбаев) айырыуса көтөп алды һәм яңылышманы. Спектакль тамашасыны тетрәндерҙе, яңы һулыш, иңрәү булып яңғыраны, бер кемде лә битараф ҡалдырманы. Театрҙың бөтә актерҙары ла ихлас уйнауы менән арбаны. Ә Макмерфи ролен башҡарған Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Хөрмәтулла Үтәшев бар булмышы менән күңелдәрҙе әсир итте. Ғөмүмән, был спектаклдә уйнаған актерҙар ансамбле хаҡында айырым мәҡәлә яҙыу урынлы.

Төрки телле театрҙарҙың IV ”Туғанлыҡ” халыҡ-ара фестивале 19 сентябрҙә Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры бинаһында сағыу тамаша менән тамамланды. Һөҙөмтәләре ҡыуаныслы уның: абруйлы бәйгенең төп приздарын Башҡортостан сәнғәт оҫталары яуланы. Бына улар, төрки телле театрҙарҙың IV ”Туғанлыҡ” халыҡ-ара фестивале лауреаттары.

**”Иң яҡшы спектакль”** призына М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының К.Кизи романы буйынса сәхнәләштерелгән ”Кәкүк ояһы” спектакле лайыҡ булды.

**”Иң яҡшы режиссер эше”** номинацияһында К.Кизи романы буйынса ҡуйылған ”Кәкүк ояһы” спектакле өсөн режиссер Айрат Абушахманов еңеүсе тип танылды.

**”Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле”** призын А.П.Чехов пьесаһы буйынса ҡуйылған ”Өс һеңлекәш” спектаклендәге Маша роле өсөн Ғ.Камал исемендәге Татар дәүләт академия драма театры актрисаһы Люция Хәмитова яуланы.

**”Иң яҡшы ир-егет роле”** номинацияһында М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының К.Кизи романы буйынса ҡуйылған ”Кәкүк ояһы” спектаклендәге Макмерфи ролен башҡарғаны өсөн Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Хөрмәтулла Үтәшев еңеүсе булды.

**”Иң яҡшы музыкаль биҙәлеш”** призы ”Читиген” Хакас музыкаль-драма театрының А.Онай пьесаһы буйынса сәхнәләштерелгән ”Чаргы” спектакле өсөн бирелде.

**”Икенсе пландағы иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле”** призына В.Шекспирҙың ”Йәйге төндәге төш” пьесаһы буйынса ҡуйылған спектаклдә Еле-

на роле өсөн В.Кок-Оол исемендәге Тыва музыкаль-драма театры актрисаһы Шенне Шоюн лайыҡ булды.

**”Икенсе пландағы иң яҡшы ир-егет роле”** призын В.Шекспирҙың ”Йәйге төндәге төш” пьесаһы буйынса ҡуйылған спектаклдә Пэк роле өсөн В.Кок-Оол исемендәге Тыва музыкаль-драма театры актеры Эдуард Ондар яуланы.

ТӨРКСОЙ халыҡ-ара ойошмаһының **”Милли традицияларҙы һаҡлаған өсөн”** премияһы түбәндәгеләргә бирелде:

— А.Онай пьесаһы буйынса ҡуйылған ”Чаргы” спектакле өсөн ”Читиген” Хакас музыкаль-драма театры коллективына;

— П.Ойунский пьесаһы буйынса ҡуйылған ”Ҡыҙыл шаман” спектакле өсөн Саха (Яҡут) Республикаһының Юмор һәм сатира дәүләт театры коллективына.

**”Рус классикаһын милли сәхнәлә сағылдырған өсөн”** призын А.П.Чехов пьесаһы буйынса ҡуйылған ”Өс һеңлекәш” спектакле өсөн Ғ.Камал исемендәге Татар дәүләт академия драма театры коллективы яуланы.

**”Милли классиканы сағылдырған өсөн”** призы Мостай Кәрим әҫәре буйынса ҡуйылған ”Беҙҙең өйҙөң йәме” спектакле өсөн М.Кәрим исемендәге БР Милли йәштәр театры коллективына бирелде.

**”Өмөт” призы** М.Кәрим исемендәге БР Милли йәштәр театрының Мостай Кәрим әҫәре буйынса ҡуйылған ”Беҙҙең өйҙөң йәме” спектаклендә Гөлнур ролен башҡарғаны өсөн Аида Әхмәтоваға тапшырылды.

**”Дебют” махсус призына** Сюзанна Ооржак лайыҡ булды. В.Кок-Оол исемендәге Тыва музыкаль-драма театрының В.Шекспир пьесаһы буйынса ”Йәйге төндәге төш” спектаклен сәхнәләштергәне өсөн.

**”Өлкән быуын традицияларына һәм идеалдарына ҡәҙерле мөнәсәбәт өсөн”** призы Ғ.Мусрепов исемендәге Ҡаҙаҡ балалар һәм үҫмерҙәр дәүләт академия театрының ”Алма баҡсаһы” спектаклендәге Ҡарт роле өсөн Турсын Ҡуралиевҡа бирелде.

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илишев ”Туғанлыҡ” IV халыҡ-ара фестивален рәсми рәүештә ябыу хаҡында иғлан иткәндә, ”Туғанлыҡ” фестивалененең сәнғәтте үҫтереүҙәге, фәнни-практик һәм башҡа бик күп әһәмиәттәре менән бер рәттән, сәйәси әһәмиәте лә ҙур, тип билдәләне.

Быйылғы фестиваль Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуының 450 йыллығы алдынан булып үтте. Фестивалдең юғары халыҡ-ара статусҡа эйә булыуы, баш ҡалабыҙ Өфөнөң төрки телле театр донъяһының абруйлы үҙәге булып әүерелеүе һәр беребеҙҙең күңелендә сикһеҙ ғорурлыҡ уятты. Нигеҙен телдәр уртаҡлығы тәшкил иткән, берҙәмлек, дуҫлыҡ, туғанлыҡ төшөнсәләрен үҙ эсенә алған был сәнғәт бәйгеһе киләсәктә лә абруйлы, тос йөкмәткеле булыр, тип ышанғы килә.

Ысын мәғәнәһендә төрки телле театрҙарҙың туғанлашыуы, бер-береһенең ижады менән танышыуы, тәжрибә уртаҡлашыуы сараһы булған фестиваль тамамланды, ә дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек дауам итә.